**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының август кәңәшмәһенең киләһе ултырышы уҙғарылды**

2018 йылдың 27 августа Аҡъяр ауылы 2-се һанлы урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының август кәңәшмәһенең киләһе ултырышы уҙғарылды. Бында райондың бөтә мәктәптәренән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, район методисы Бикбаев Г.Г, Мәғариф идаралығы инспекторы Аҡкусҡарова Ф.Д., хеҙмәт ветерандары Бохарбаева М.И., Азаматова М.Х. ҡатнашты.

Иң беренсе сиратта РМБ етәксеһе Түлибаева Р.И. 2017-2018 йылында башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте уҡытыусыларының методик берекмәһе эшенә анализ яһаны.

"2018-2019 уҡыу йылында Хәйбулла районының белем биреү ойошмаларында дәүләт һәм туған телдәрҙе өйрәнеүҙә рухи-әхлаҡи хәүефһеҙлек мәсьәләләре" темаһына түңәрәк өҫтәл үткәрелде.

Мәмбәт урта мәктәбе директоры, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мәмбәтова Ә.Ә. ("Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын тормошҡа ашырыу шарттарында уҡыусыларҙың универсаль уҡыу күнекмәләрен формалаштырыу"), Подольск урта мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы Дәүләтбирҙина Г.М. ("Цифрлы белем биреү ресурстары аша башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә мотивация булдырыу"), Сиҙәм урта мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы Иштәкбаева Ф.Ә. ("Уҡыусыларҙа туған телдә белем алыуға ҡыҙыҡһыныуҙы үҫтереү сараһы булараҡ Блум технологияһын ҡулланыу") оҫталыҡ кластары күрһәтте.

Ултырыш сығыштар буйынса фекер алышыу, 2018-2019 уҡыу йылына эш планын ҡабул итеү, юбилярҙарҙы, юғары һөҙөмтәләр күрһәткән уҡытыусыларҙы тәбрикләү менән тамамланды.




МЕТАЛЛОВ



